ВикипедиЯ
*Ирекле энциклопедия*

UG BAK

# Башҡорт Википедияһы саралары

Башҡорт Википедияһының тыуған көнө – 2005 йылдың 16 апреле. Билдәһеҙ автор был көндә «Башҡортостан» тип аталған беренсе мәҡәлә яҙа. Бөгөн Башҡорт Википедияһы донъялағы  300 ойошма араһында беренсе 100 иҫәбенә инә. Әле унда 48 мең самаһы мәҡәлә яҙылған. Башҡорт Википедияһы үҙен бар донъяға танытып, интернет-энциклопедиялар араһында иң тиҙ үҫеүсе проект булып тора.



2015 йылда уҙғарылған “Вики-Һабантуй” Башҡорт Википедияһы тарихында һынылышлы була. Был сарала республика вәкилдәре генә түгел, Рәсәй Федерацияһынан: Сыуашстандан, Татарстандан, Тыванан, Удмуртстандан, Саха-Яҡутстандан, Свердловск, Төмән, Ырымбур, Ярославль өлкәләренән, Мәскәүҙән һәм Санкт-Петербургтан ҡунаҡтар ҡатнаша.



БАШҠОРТОСТАН
викимедиасылары
төркөмө

2015 йылдың ноябрендә Башҡортостан викимедиасылары йәмғиәте донъя кимәлендә танылыу табып, дөйөм исемлектә - 49-сы, Рәсәйҙә иң беренсе юзер-төркөм булып теркәлә.

2016 йылдың мартында Янғантау санаторийы базаһында әүҙем википедистар өсөн бер аҙналыҡ семинар ойошторолдо. Унда оҫталыҡ дәрестәре үткәрелде, система хәбәрҙәре башҡорт теленә тәржемә ителде, башҡорт халҡының милли батыры Салауат Юлаев, Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғарипов, легендар көрәшсе Харис Йософов музейҙарына экскурсия үткәрелде.





2016 йылда Петрозаводск ҡалаһында үткән фин-уғыр телле википедистар семинарында ҡатнашып, Ансар Нуретдинов Башҡорт Википедияһының эш тәжрибәһе менән бүлеште.

2016 йылдың июлендә Бөрйән районында ойошторолған Вики-йәйләүҙә Шүлгәнташ мәмерйәһе менән таныштыҡ.



2016 йылдың сентябрендә Удмуртстандың баш ҡалаһы Ижевскиҙа үткән Вики-Урал семинарында Башҡорт Википедияһынан Рөстәм Нурыев, Зөлхизә Батырова һәм З. Әйле ҡатнашты.





Эльза Мөхәмәҙиева Украинаның Киев ҡалаһында үткән вики-конференцияла ҡатнашыусылар менән

Photo - BioDasha

2016 йылда Санкт-Петербургта үткән вики-конференцияға өс вәикл барҙы: Зөфәр Сәлихов, Ләйсән Аралбаева, З. Әйле.

Photo - ZUFAr



2016 йылда Италияла үткән Wikimania сараһында Рөстәм Нурыев, Ришат Сәйфетдинов төрки телле википедистар менән

Photo - Basak





2016 йылда Әрмәнстандың Дилижан калаһында үткән конференцияла Ришат Сәйфетдинов катнашты




Өфөлә үткән сираттағы вики-осрашыуҙан һуң. 2017 йыл.



2017 йылда Германияның Берлин ҡалаһында үткән конференцияға Башҡорт Википедияһынан 3. Әйле менән Виктор Семенюк барҙы.




«Екатеринбург-ЭКСПО» халыҡ-ара күргәҙмә залында «Ҙур Урал» V Халыҡ-ара туризм форумы үтте. Мәртәбәле оло форумда төрлө төбәктәрҙән һәм сит илдәрҙән 3 меңдән ашыу делегат ҡатнашты. Башҡортостан википедистарынан Зөфәр Сәлихов саҡырылды. Пленар ултырышта «Викимедиа РУ» йәмғиәт ойошмаһы ағзаһы Николай Литвинов Уралды популярлаштырыуҙа Википедияның әһәмиәте тураһында сығыш яһаны. «Вики Урал» халыҡ-ара конкурсының I этабы еңеүселәренең бүләктәре Зөфәр Сәлиховҡа тапшырылды.



Дербентта Дағстан телдәрендәге википедиялар проблемаларына арналған семинар булып үтте. Семинарҙа Викимедиа РУ партнёрлығы директоры В. В. Медейко, Дон төркөмөнән Дмитрий Жуков, эрзя википедияһынан Андрей Петров, лезгин һәм башҡорт википедияһы хакимы Олег Абарников(Х,И), башҡорт википедияһынан Зөфәр Сәлихов һәм Ришат Сәйфетдинов ҡатнашты.



Сираттағы викиосрашыуҙа Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Думаһы депутаты Рәмзил Ишһарин ҡатнашты. Рәмзил Рафаил улы Дәүләт Думаһы тарафынан ирекмәнлек тураһында федераль закон проекты тураһында һөйләне һәм әҙерләнгән ҡанун буйынса фекер алышырға саҡырҙы, Башҡорт Википедияһына ярҙам итергә әҙерлеген белдерҙе.



2017 йылдың 23 апрелендә етенсе тапҡыр «Ирекле белем» һәм «Вики-премия 2017» тапшырылды. Рәсәй телдәре номинацияһында премияға Башҡорт Википедияһынан Ryanag лайыҡ булды. Ҡатнашыусы килә алмау сәбәпле, премия Зөфәр Сәлиховҡа тапшырылды.

Удмуртияла үткән семинарға барғанда Вики-өләсәйҙәр төркөмөн төҙөү идеяһы тыуҙы. Хәҙер Башҡорт Википедияһында ҡатын-ҡыҙҙар алдынғы урында тора һәм әүҙемлеге менән айырыла. Бөгөн дә Вики-өләсәйҙәр сафы арта бара.





Бөрйән, Өфө райондарында һәм Сибай ҡалаһында вики-клубтар эшләй.

2017 йылдың октябрендә Мәскәүҙә үткән Рәсәй википедистарының конференцияһында Башҡортостандан иң ҙур делегация ҡатнашты - 11 вәкил. Шуларҙың 8-һе –гүзәл зат, шул иҫәптән 6 вики-өләсәй булды.



2017 йылдың октябрендә Мәскәүҙә үткән Рәсәй википедистарының конференцияһында Вики-өләсәйҙәр үҙҙәренең эш тәжрибәһе менән бүлеште. https://ru.wikimedia.org/wiki/Вики-конференция_2017/Итоги һылтанмаһы буйынса инеп, «О проекте «Башкирские вики-бабушки» тигән бүлектә танышырға мөмкин.



**Станислав Козловский, исполнительный директор НП «Викимедиа РУ», доцент кафедры психофизиологии МГУ им. М. В. Ломоносова:** «Вики-бабушки - это, пожалуй, лучший проект во всём движении».

# Бына улар, Мәскәүҙе яулап ҡайтҡан вики-өләсәйҙәрҙең бер өлөшө башҡа тел бүлектәре википедистары менән.



# 2017 йылда БашВики хакимы Зөфәр Сәлихов Волга буйы вики-семинарында ҡатнашты.






UfaForum 2017 йәштәр форумында «Этнотел мәсьәләләре: алтын урталыҡты эҙләү» дискуссия майҙансығында Башҡорт Википедияһы ирекмәне З. Әйле спикер ролендә сығыш яһап, йыйылыусыларға башҡорт телен үҫтереү һәм һаҡлау юлында бер ысул булараҡ, Башҡорт Википедияһының әһәмиәте тураһында һөйләне.



«Башҡортостан викимедиасылары» төркөмө һәм «Викимедиа РУ» йәмғиәт ойошмаһы берлектә ойошторған сираттағы II «БашВикиКонф 2017" конференцияһы үтте. Унда Мәскәүҙән «Викимедиа РУ» директоры В. В. Медейко, шулай уҡ ойошма ағзалары Д. Рожков һәм Р. Сәйфетдинов саҡырылды.



Башҡорт википедиясыларының сираттағы осрашыуына Рәсәй Президенты грантын алырға булышлыҡ иткән «Молодая Гвардия» төбәк ойошмаһының Башҡортостан бүлексәһе етәксеһе Люциә Юлыева килде.

«Викимедиа Дойчланд» Берлинда сираттағы конференцияһын үткәрҙе. Сарала донъяның 50-гә яҡын иленән делегаттар ҡатнашты. Башҡорт вики-йәмғиәте унда Ришат Сәйфетдинов менән Зөфәр Сәлиховты ебәрҙе.





13-15 октябрҙә Wikimedia CEE Meeting 2018 — Үҙәк һәм Көнсығыш Европа илдәре викимедиасыларының сираттағы конференцияһы Украинаның Львов ҡалаһында үтте. Был сараға Сәриә62 һәм З. ӘЙЛЕ барҙы. Шулай уҡ Польшанан Вячеслав Чернев та килде. Сарала төрлө илдәрҙән йыйылған 70-тән ашыу кеше ҡатнашты. Рәсәйҙән Мәскәү, Дондағы Ростов тарафтарынан рус википедияһы эшмәкәрҙәре лә, эрзя, татар википедияһы вәкилдәре лә булды.

Викисаммит – 2019. Германия. Берлин. Ҡатнашыусы – Башҡорт Википедияһы хакимы Олег Абарников.



Киң мәғлүмәт сараларында даими сығыш яһайбыҙ, журналистарҙы ҡыҙыҡһындырған һорауҙарҙың береһе – Вики-өләсәйҙәр һәм уларҙың нисек итеп мәҡәләләр эшләүе, хаталар төҙәтеүе һәм төрлө сараларҙа ҡатнашыуы.



# Иғтибарығыҙ өсөн рәхмәт!

ВикипедиЯ
*Ирекле энциклопедия*

БАШҠОРТОСТАН
викимедиасылары
төркөмө

